# Үҙ телемдә һөйләшәм

**21 февраль – Бөтә донъя туған телдәр көнөнә арналған интеллектуаль уйын**



# 21 февраль – Бөтә донъя туған телдәр көнө

















**Үҙ телемдә һөйләшәм -**
**Бар булмышым нур ғына.**
**Үҙ телемдә һөйләшәм -**
**Күңелкәйем нур ғына.** *Динә Талхина.*



# *Беренсе тур.*

# **Башҡорт халыҡ ижады.**



**Мәкәлдәрҙе дауам итегеҙ.**

1.Әйткән һүҙ - …..
2.Ике уйла, ……
3.Яҡшы һүҙ … татлы.
4.Үҙ илең - …... .
5.Кем эшләмәй, …. .
6.Алтын-көмөш яуған ерҙән, …
7.Иле барҙың теле бар ….
8.Ни сәсһәң, ….
9.Ҡалған эшкә …. .
10.Һөйҙөргән дә тел, ….. .



## Йомаҡтарҙың яуабын табығыҙ.

1.Аяғы юҡ - ил гиҙә, күҙҙәре юҡ – йәш түгә.
2.Ҡат-ҡат ҡатлама, аҡылың булһа, ташлама.
3.Аллы-гөллө көйәнтәмде йылға арҡылы ташланым.
4.Башы – тауҙа, аяғы – диңгеҙҙә.
5.Ике малай бергә тора, берен-бере күрә алмай.
6.Ҡалаһы бар – халҡы юҡ, диңгеҙе бар – һыуы юҡ.
7.Һиңә бирелгән, башҡалар файҙалана.
8.Сәскәһе – ағасында, алмаһы – тамырында.




, р

б



,





з=л

,



о=у

к=л



Йү 



,,


www.fond-adygi.ru

# *Икенсе тур.*

# Викторина.

1. Башҡорт теленең алфавитында нисә хәреф?
2. Башҡорт телендә ниндәй хәрефтәргә һүҙ башланмай?
3. Өфөнөң уртаһында нимә бар?
4. Кисә аҙнаның ниндәй көнө ине?
5. Мәктәптәге иң насар билдә?
6. Алфавитта һуҙынҡылар күпме, әллә тартынҡылармы?
7. Бер һүҙҙә 6 н буламы?
8. Нимә һөйәкһеҙ була?
9. Ҡала менән ауыл араһында нимә бар?
10. Иң ҡыҫҡа ай ниндәй?
11. Һыуҙа ниндәй таш булмай?
12. Башҡортостандың ҡайһы районы һауала оса?

**Кешесә бәхетле булдым,**
**Яндым, көйҙөм кешесә.**
**Тыуған илде, ғәзиз ерҙе**
**Ярһып һөйҙөм кешесә …**

*З.Биишева*






# «Серле квадрат»

| | | | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Ғ | Б | И | И | Ш | Е | В | А | К | Ә |
| А | Р | И | П | О | В | Й | О | С | Р |
| Н | И | Г | Е | Б | В | О | П | О | И |
| И | Б | В | Е | А | Б | А | Е | В | М |
| Ғ | И | К | Б | А | Н | А | С | А | Ш |
| М | Ә | Т | И | Е | В | Ҡ | У | Д | А |



# *Дүртенсе тур.*

# Башҡорт әҙәбиәте.

1. … Йәшел шыршы матурлана,
Уйынсыҡтар тағылһа,
Алтын, көмөштәй нурлана,
Киске уттар ҡабынһа…

2. …Уңған ҡыҙ менән Яман малай мин киткәнде белмәй ҡалды. Улар менән хушлашмауыма бик үкендем. Үҙҙәрен бик һағындым…

3. … - Ағай, юҡ менән булышҡансы, бушыраҡ арала әйҙә анау Айбатҡан кисеүенә күпер һалайыҡ. Шунда, йылғаны аша сыҡҡанда, халыҡ бик интегә. Исмаһам, бер файҙалы эш эшләйек…

4.Ай, Ағиҙел, Ағиҙел,
Күпте күргән Ағиҙел,
Ҡартлас Урал ни күрһә,
Шуны күргән Ағиҙел…

5.Әсәм теле минең — сәсән теле,
Унан башҡа минең халҡым юҡ,
Йөрәгендә халҡы булмағандың
Кеше булырға ла хаҡы юҡ!

**Эй, кешеләр, үҙе иҫән саҡта**
**Белегеҙсе шағир ҡәҙерен !..**

*Р.Ғарипов*





## ТУҒАН ТЕЛ. Р.Ғарипов

Мин халҡымдың сәскә күңеленән
Бал ҡортондай ынйы йыямын,
Йыямын да — йәнле ынйыларҙан
Хуш еҫле бер кәрәҙ ҡоямын.

Шуға ла мин беләм тел ҡәҙерен:
Бер телдән дә телем кәм түгел —
Көслө лә ул, бай ҙа, яғымлы ла,
Кәм күрер тик уны кәм күңел!..

Халҡым теле минең — хаҡлыҡ теле,
Унан башҡа минең илем юҡ;
Илен һөймәҫ кенә телен һөймәҫ,
Иле юҡтың ғына теле юҡ!

Әсәм теле минең — сәсән теле,
Унан башҡа минең халҡым юҡ,
Йөрәгендә халҡы булмағандың
Кеше булырға ла хаҡы юҡ!



## Еңеүселәрҙе котлайбыҙ һәм бөтә катнашыусыларға рәхмәт белдерәбеҙ!



**Һау булығыҙ!**

**Киләһе осрашыуҙарға тиклем!**

